БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ МУНИЦИПАЛЬ БАЙМАҠ РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ 1-СЕ ТӨРКМӘН АУЫЛЫНЫҢ УРТА ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘБЕ МУНИЦИПАЛЬ ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ

| | | |
|---|---|---|
| Ҡаралған<br>МБ ултырышында<br>---------------------<br>Баймырҙина Г.М.<br>28.08.2023<br>протокол №1 | Килешелгән<br>УТЭ буйынса директор урынбаҫары<br>---------------------<br>Ниғмәтуллина Ф.К.<br>29.08.2023 | Раҫлайым<br>Мәктәп директоры<br>---------------------<br>Ҡаһарманова З.С.<br>30.08.2023<br>Бойороҡ |

***Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән***
***10-11-се кластар өсөн***

# эш программаһы

Төҙөнө:
1-се Төркмән урта мәктәбенең
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
***Ласынова Г.Р.***

2023-2024 уҡыу йылы

V—IX синыфтарҙың программаһы әсә теленән булған барлыҡ эштәрҙең йөкмәткеһен һәм йүнәлештәрен үҙ эсенә ала. Ул йүнәлештәрҙең иң мөһиме — туған тел һәм туған әҙәбиәт дәрестәрендә белем менән бер рәттән тәрбиә биреүҙе тығыҙ бәйләнештә алып барыу.

**10-11-се кластарҙа "Башҡорт теле" фәнен урта дөйөм белем биреү кимәлендә өйрәнеү һөҙөмтәһендә сығарылыш уҡыусыһы база кимәлендә түбәндәге күнекмәләргә өйрәнә:**

- йәмғиәт тормошонда телдең роле, туған телдең әһәмиәте, йәмғиәт үҫешендәре роле, ижтимағи әһәмиәтен аңлы ҡабул итеү;
- ябай, ҡушма һөйләм синтаксисын, стилистикаһын иркен файҙалана белеү, уларҙа ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең әһәмиәтен билдәләү;
- тыныш билдәләре, текст, һөйләм интонацияһы, телмәр тибын аңлы ҡабул итеү;
- һүҙбәйләнеш, ябай, ҡушма һөйләм, тура телмәр, диалог, айырымланыу күренештәре менән эш итә белеү;
- теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр, уларҙың схематик бирелеше, айыра  һәм телмәрҙә ҡуллана белеү;
- ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр һәм уларҙың грамматик бирелеше;
- бөтә төр анализдар:фонетик, лексик, морфологик, һүҙьяһалыш, синтаксик, стилистик анализдарҙы үтәү;
- орфоэпия, графика, офография ағиҙәләре;
- текст һәм уның эсендәге һөйләмдәр, уларҙың стилдәре;
- телмәр төрҙәре (типтары) буйынса анализдар;
- һүрәтләү сараларын текстан таба белергә һәм ҡулланырға тейеш, башҡорт теленең һүҙлек байлығын белергә тейеш.

-башҡорт теленең матурлығын, тасуирилығын һәм яғымлылығын тоя белеү һәм уның менән ғорурланыу, башҡорт теле менән   ҡыҙыҡһыныу;

-белем алыуҙың кәрәклеген, киләсәк өсөн мөһимлеген аңлау;

- башҡа халыҡтар тарихына, мәҙәниәтенә ихтирамлы булыу;

-дәрестең темаһын һәм маҡсатын үҙ аллы билдәләү;

- уҡытыусы, коллектив менән бергә ҡуйылған проблеманы хәл итеү юлдарын табыу;

-үҙ-үҙеңде дөрөҫ баһаларға өйрәнеү;

-уҡытыусының телмәрен, уҡыусыларҙың һөйләгәнен, башҡортса аудио һәм видеояҙмаларҙы тыңлау һәм аңлау;

-шиғырҙы һәм сәсмә әҫәрҙәрҙән өҙөктө тасуири уҡыу, аңлау һәм һөйләй белеү;

- уҡылған әҫәрҙәр тураһында үҙ фекереңде әйтә белеү һәм иҫбатлау;

-төрлө темаға ( мәктәп, ғаилә, дуҫтар, ял ваҡыты, уйындар, йыл миҙгелдәре, уҡылған китап) диалог һәм монолог төҙөй белеү;

-хәбәр, һорау, өндәү, бойороҡ һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәнеү, һөйләмдәр аҙағында тейешле тыныш  билдәләре ҡуя белеү;

-һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөй белеү, уларҙың эсендә һүҙҙәрҙең, һөйләмдәр менән һөйләмдәр араһындағы  бәйләнеште дөрөҫ билдәләү;

-ябай һәм ҡушма һөйләмдәргә синтаксик һәм пунктуацион анализ яһау;

-телмәрҙә тиң киҫәктәрҙе дөрөҫ ҡуллана белеү, теркәүесле һәм теркәүесheҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе, өндәш һүҙле һөйләмдәрҙе телмәрҙә ҡулланыу;

- өндәрҙең һуҙынҡыларға һәм тартынҡыларға, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларға бүленеү сәбәптәрен аңлата белеү; һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе дөрөҫ әйтеүгә өлгәшеү;

-төп башҡорт һәм рус телдәренән ингән һүҙҙәрҙең баҫымдарын сағыштырыу күнекмәһенә эйә булыу;

-телдең лексик системаһының байлығын аңлау;

-һүҙҙең лексик мәғәнәләрен билдәләү күнекмәһенә эйә булыу;

- тура һәм күсмә мәғәнәләге һүҙҙәрҙе таный белеү;

-күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен таныу һәм уларҙы телмәрҙә файҙаланыу;

-текстан синоним, антоним, омонимдарҙы таба белеү һәм телмәрҙә ҡулланыу;

- аңлатмалы, ике телле, синоним, антоним, омоним һүҙлектәр менән файҙалана белеү;

-һүҙҙәрҙең тамырын, яһаусы, үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы билдәләй алыу;

-һүҙьяһалыш юлдарын күрһәтә белеү һәм яһалышы яғынан анализ яһау;

-исемдәрҙең яһалыу юлдарын билдәләй белеү, исемдәргә морфологик анализ яһау;

-затлы ҡылымдарҙың мәғәнәләрен, морфологик билдәләрен, синтаксик ролен билдәләй алыу; үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдарҙы айыра белеү; төрлө ысул һәм саралар менән ҡылым яһау;бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының мәғәнәләрен билдәләү; үтенесте, инәлеүҙе, ҡаты бойороуҙы, саҡырыуҙы, өндәшеүҙе телмәрҙә ҡуллана белеү; теләк һөйкәлеше ҡылымдарының төрлө мәғәнә биҙәген сағылдырған формаларын телмәрҙә ҡулланыу. Ҡылымға морфологик анализ яһай белеү.

**Базис кимәлендә сығарылыш уҡыусыһы *түбәндәге күнекмәләргә өйрәнеү мөмкинлеген ала*:**

1)Башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли - мәҙәни ҡиммәттәре булара
ҡ аңлау,интеллектуаль, ижади һәләттәрен һәм шәхестең мораль - этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
2)Башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли - мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙ алығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;
3)Аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Төп дөйөм белем биреү мәктәбенең сығарылыш уҡыусыларының башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙә шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:
1)Башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли - мәҙәни ҡиммәттәре булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләттәрен һәм шәхестең мораль - этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
2)Башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли - мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙ алығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;
3)Аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

**Туған (башҡорт) телен үҙләштереүҙең метапредмет һөҙөмтәләре:**

1)телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү: аудирование һәм уҡыу:
*телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, теке темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәлмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;
*төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү);төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;
*төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү;аудирование менән эш итеү(һайлап алыу, танышыу);
*төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлелеге (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт -дискылар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу; белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәһен булдырыу;
*һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;

*стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм кулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;
һөйләү һәм яҙыу:
*алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең ( индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, эштең эҙмә -эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау, уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;
*тыңлаған йәки уҡылған тексты тәкдим ителгән кимәлдә( план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;
*төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа аралашыу ситуацияһына ҡарап телдә һәм яҙма текст төҙөй алыу;
*телдән һәм яҙма формала үҙ фекерендe иркен еткерә белеү, текст логик яктан эҙмә - эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;
*төрлө төрҙәге монологты (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтарҙ ың берләшеүе) һәм диалогты (этикетты үҙ эсенә алған, диалог - һорашыу, диалог - аралашыуға өндәү, диалог - фекер алышыу һ. б.; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүе) үҙләштереү;
*ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙ әби теленең стилистк нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләр ҙе һаҡлау;
*телмәр этикет нормаларын һаҡлау, аралаша алыу,телмәр аралашыу процесында ым - ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;
*уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәрендe контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып,үҙ телмәрендe баһалай белеү;грамматик һәм телмәр хаталарын таба, уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексынды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;
*үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, реферат менән сығыш яһау; бәхәстә, төрлө аргументтар ҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;
2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа төрлө фәндәрҙән белем алыу сығанағы буларак файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет - ара (сит тел, әҙәбиәт һ. б. дәрестәрҙә) ҡ улланыу;
3)аралашыу процесында тирә - яктағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡ атнашыу; формаль һәм формаль булмаған шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли - мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

**10-сы класта башҡорт теле предметының төп йөкмәткеһе**

Тел һәм телмәр - 4 сәғәт

Тел һәм мәҙәниәттең бәйләнеше.Телдә мәҙәниәттең һәм халыҡ тарихының сағылышы.

Тел һәм уның вазифаһы. Башҡорт теленең функциональ үҫеше. Донъя телдәре. Телдәрҙең күп төрлөлөгө.

Башҡорт теле ҡәрҙәш телдәр араһында. Үле һәм тере телдәр. Тәбиғи һәм яһалма телдәр.

Тел төҙөлөшө һәм тел тураһында фән бүлектәре. Тел һәм телмәр. Әҙәби тел – нормаға һалынған тел. Телмәр мәҙәниәте. Дөрөҫ әйтелеш нормалары.

Лексика, фразеология - 4 сәғәт

Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге. Омонимдар.Омофондар Синонимдар. Антонимдар. Уларҙың телмәрҙәге роле. Төп башҡорт һүҙҙәренең айырмаһы. Һүҙлектәрҙең тәғәйенләнеше. Фразеологик берәмектәрҙең телмәрҙе биҙәүҙәге роле.

Фонетика, графика3-1 сәғәт

Фонетика бүлегенә ҡараған темаларҙың бүленеше. Интонация. Телмәр такты. Һуҙынҡы өндәрҙең бүленеше. Редукция, протеза, эпентеза, элизия тел күренештәре.

Графика – фонетика бүлегенә ҡараусы тема.

Һүҙьяһалыш -2 сәғәт

Һүҙ составы һәм һүҙъяһалыш. Телдә һүҙьяһалыш ысулдары. Һүҙьяһалыш һәм стилистика. Һүҙҙең яһалыу юлдарының телмәргә йоғонтоһо.

Грамматика (исем, сифат, һан, алмаш) - 3 сәғәт

Грамматика – тел бүлегенең бер бүлеге. Уның морфология һәм синтаксистан тороуы.

Башҡорт телендә Һүҙ төркөмдәре. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре.

Исем. Исемдәрҙең мәғәнәләре яғынан бүленеше. Килеш, эйәлек заты, хәбәрлек заты, һан менән үҙгәреше. Һөйләмдә эйә, хәбәр һәм башҡа эйәрсән киҫәктәр булып килеүе. Исемдәрҙең эйәлек һәм хәбәрлек категориялары.

Сифат. Төп һәм шартлы сифаттар. Һөйләмдә анығлаусы. Хәбәр, хатта хәл булып килеүе. Сифаттарҙың телмәрҙе исемләшеүе.

Һан. Төркөмсәләре. Телмәрҙәге морфологик һәм синтаксик билдәләре.

Алмаш. Уларҙың мәғәнәһе. Алмаштарҙың стилистик мөмкин-селектәре.

Ҡылым – 4 сәғәт.

Ҡылым - тулы мәғәнәле һүҙ төркөмө. Ҡылымдарҙың лексик-семантик төркөмдәре. Күсемле, күсемһеҙ ҡылымдар. Ҡылымдарҙың грамматик категориялары. Һөйкәлеш.Һөйкәлеш формаларының зат менән үҙгәреше.Үткән заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының стилистик мөмкинселектәре. Хәҙерге һәм киләсәк заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының стилистик мөмкинселектәре. Ҡылым төркөмсәләренең телмәрҙә ҡулланылышы. Сифат ҡылым. Исем ҡылым. Хәл ҡылым. Уртаҡ ҡылым.

Ҡылым күләмдәре. Ҡылым рәүешлеге (модаллеге).

Ҡылымдарҙың лексик-семантик төркөмдәре.

Ҡылымдарҙың һөйләмдәге синтаксик роле. Программала ҡаралған курстың йөкмәткеһе фәнни һәм еңел аңлайышлылыҡ, системалылыҡ һәм күсәгилешлек нигеҙендә эшләнде. Тел материалы кластар буйынса милли мәктәптәрҙең уҡыу планына яраҡлаштырып бүленде. 11-се класта рәүеш, ярҙамсы һүҙҙәр, саҡырыу һүҙҙәре, оҡшатыу һүҙҙәре, синтаксис һәм текст синтаксисы өйрәнелә.

Рәүеш.

Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы- 1 сәғәт

Рәүештәрҙең мәғәнәһе һәм грамматик үҙенсәлеге, уларҙың башҡа һүҙ төркөмдәренә мөнәсәбәте. Рәүештәрҙең һөйләмдәге вазифалары: улар, күбеһенсә, һөйләмдә хәл булып килә.

Рәүеш төркөмсәләре:

- хәл рәүештәре;
- оҡшатыу рәүештәре;
- күләм-дәрәжә рәүештәре;
- ваҡыт рәүештәре;
- урын рәүештәре;
- сәбәп рәүештәре.

Рәүештәрҙең дәрәжәләре:төп (шәп, иртә, күп һ.б), сағыштырыу (һуңыраҡ, элегерәк һ.б.), артыҡлыҡ (бик тиҙ, үтә яй, шар асыҡ һ.б.), аҙһытыу (әкрен генә, уйлап ҡына һ.б.). Төҙөлөшө буйынса рәүештәр өс төргә бүленә: тамыр (аҙ, бая, кинәт һ.б.), яһалма (ауылса, һинекесә,

игенләтә һ.б.), ҡушма (тартып-һуҙып, эҫеле-һыуыҡлы, бер тауыштан һ.б.). Төрлө дәрәжәләге рәүештәрҙе күркәм әҫәрҙә билдәләй белеү, телмәрҙә ҡулланыу.

Ярҙамсы һүҙҙәр. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы- 1 сәғәт

Ярҙамсы һүҙҙәрҙең үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмаһы, рәүештәргә яҡынлығы.
Бәйләүестәр, уларҙың төрҙәре: исем бәйләүестәре һәм ҡылым бәйләүестәре. Теркәүестәр морфологик составы яғынан ябай һәм ҡушма теркәүестәргә, ә һүҙҙәр һәм һөйләмдәр араһындағы бәйләнеш типтары буйынса теҙмә һәм эйәртеүле теркәүестәргә бүленә.
Киҫәксәләр, уларҙың рәүешкә һәм бәйләүестәргә яҡынлығы. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең стилистик мөмкинлектәре, күркәм әҫәрҙә төрлө хис-тойғо булдырыуҙа роле.

Модаль һүҙҙәр. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы-1 сәғәт

Модаль һүҙҙәрҙең асылы. Уларҙың разрядтары: раҫлау һәм инҡар итеү, тейешлек һәм кәрәклек модаль һүҙҙәре, мөмкинлек модаль һүҙҙәре, самалау һәм икеләнеү модаль һүҙҙәре, иғтибарлылыҡ һәм өндәшеү модаль һүҙҙәре.

Ымлыҡтар. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы- 2 сәғәт

Ымлыҡтар функцияһы яғынан икегә бүленә:
- ирекһеҙҙән, ҡапыл ҡурҡҡанда әйтелгән ымлыҡтар;
- субъекттың һөйләнелгән телмәргә булған хис-тойғо мөнәсәбәтен сағылдырыусы ымлыҡтар.
Ымлыҡтарҙы төрлө функциональ стилдәрҙә ҡулланыу.

Оҡшатыу һүҙҙәре. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы.

Оҡшатыу һүҙҙәренең өноҡшаш һәм һыноҡшаш һүҙҙәргә бүленеүе. Өноҡшаш һүҙҙәрҙең тауыш яңғырашын белдереүе, һыноҡшаш һүҙҙәрҙе яҡтылыҡты, торош һәм хәрәкәттең һынын сағылдырыуы. Оҡшатыу һүҙҙәренең һөйләмдәге вазифалары һәм уларҙы төрлө стилдәрҙә файҙаланыу.

Саҡырыу һүҙҙәре. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы.

Саҡырыу һүҙҙәренең мәғәнәләре һәм вазифалары. Уларҙың ымлыҡтарға яҡынлығы.
Ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен, модаль, оҡшатыу, саҡырыу һүҙҙәрен, ымлыҡтарҙы телмәрҙә (иншаларҙа, изложениеларҙа) файҙалана белеү.

Синтаксис. Уның телмәрҙә ҡулланылышы- 3 сәғәт

Синтаксистың предметы. Уның берәмектәре. Һүҙбәйләнеш: теҙмә һәм эйәртеүле бәйләнеш.
Теҙмә бәйләнештең алымы: компоненттарҙың үҙ-ара тиң булыуы. Эйәртеүле һүҙбәйләнештәрҙең төрҙәре: башҡарылыу, йәнәшәлек, һөйкәлеү, ярашыу.
Синтагма. Уның киҫәктәре. Синтагма, телмәр такты, тын алыу төркөмө, цезура. Синтагманың аралашыуҙа мөһимлеге.

Һөйләм. Уның телмәрҙәге урыны – 4 сәғәт.

Ике составлы һөйләмдәр. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Һөйләмдә һүҙ тәртибе: һүҙ тәртибенең нейтраль формаһы. Һөйләмдә инверсион һүҙ тәртибе. Һөйләмдең йөкмәткеһен тулы, аныҡ һәм тасуири итеп сағылдырыуҙа эйәрсән киҫәктәрҙең мөһимлеге. Хәбәр итеү, һорау, өндәү һәм бойороҡ һөйләмдәр.Тексты тасуирлап, тыныш билдәләрен күҙәтеп, дөрөҫ интонация менән уҡыу. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре: аныҡлаусы, тултырыусы, хәлдәр, өҫтәлмәлек. Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар. Тура һәм ситләтелгән тултырыусылар. Өҫтәлмәлектәр. Хәлдәр. Уларҙың мәғәнәләре яғынан төрҙәре: ваҡыт,урын, маҡсат, шарт, сәбәп, рәүеш, күләм-дәрәжә, кире хәлдәр. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәрен таный белеү. Өҫтәлмәлектәрҙе һөйләмдә ҡуллана белеү. Хәлдәрҙе телмәрҙә файҙалана белеү күнекмәһе.

Тиң киҫәктәр. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы- 2 сәғәт

Һөйләмдең барлыҡ киҫәктәре лә тиң була ала. Текстарҙан тиң киҫәктәрҙе билдәләй белеү, уларҙың йыйнаҡ, тарҡау булыуҙарын, улар янында тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлата белеү күнекмәһе.

Айырымланған эйәрсән киҫәктәр. Уларҙың стилистик әһәмиәте- 1 сәғәт

Айырымланған эйәрсән киҫәктәр тураһында ҡабатлау. Һөйләм киҫәктәрен айырымлауҙың синтаксик, морфологик, семантик шарттары. Аныҡлаусының айырымланыуы өсөн уны үҙе асыҡлаған һүҙҙән һуң тороуы кәрәк. Өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыу сәбәптәре, грамматик шарттары. Исемдәрҙән, рәүештәрҙән, ҡылымдарҙан килгән хәлдәрҙең айырымланыуы. Хәл әйтемдәренең айырымланыу шарты. Уҡыусыларҙың айырымланған эйәрсән киҫәктәрҙе , хәл әйтемдәрен файҙалана белеүе.

Бер составлы һөйләмдәр. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы- 1 сәғәт

Бер составлы һөйләмдәр тураһында үткәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Инфинитиф – ҡылым һөйләмдәр тураһында төшөнсә, уларҙың сруктур яҡтан төрҙәре. Күркәм әҫәр текстарында бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәрен таный белеү. Яҙма эштәрҙә бер составлы һөйләмдәрҙе файҙалана белеү.

Тулы һәм кәм һөйләмдәр. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы-1 сәғәт

Тулы һәм кәм һөйләмдәрҙе иҫкә төшөрөү. Кәм һөйләмдәрҙең бер составлы һөйләмдәрҙән айырмаһы. Кәм һөйләмдәрҙе ҡулланып, хикәйәләр, диалогтар төҙөү.

Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеш булмаған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр-1 сәғәт

Өндәш һүҙ һәм уның асылы. Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәрҙе таный белеү, һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу.

Ҡушма һөйләм. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. Теҙмә ҡушма һөйләмдәр- 2 сәғәт

Ҡушма һөйләмдәр тураһында үткәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Ҡушма һөйләмдәр эсендәге ябай һөйләмдәр араһында грамматик бәйләнеш: теҙмә бәйләнеш һәм уны сағылдырыусы саралар. Теркәүесле һәм теркәүесheҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә ябай һөйләмдәр араһындағы мәғәнә мөнәсәбәттәрен айыра белеү һәм телмәрҙә ҡуллана белеү. Төрлө мәғәнә мөнәсәбәтен сағылдырған теҙмә ҡушмаһөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән әйтеү.

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы-8 сәғәт

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр тураһында үткәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә бәйләнеп килеү ысулдары. Мәғәнә яғынанэйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре: эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы, хәл эйәрсән һөйләмдәр. Хәл эйәрсән һөйләмдәренең хәл әйтемдәренән айырмаһы. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе телмәрҙә ҡуллана белеү һәм дөрөҫ интонация менән әйтеү.

Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. Уның телмәрҙәге урыны-3 сәғәт

Ҡатмарлы ҡушма һөйләмдәр тураһында төшөнсә. Күп ябай һөйләмле теҙмә ҡушма һөйләмдәр, уның төрҙәре. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләм. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр һәм уның төҙөлөшө яғынан төрлөлөгө. Теҙемдәр һәм уларҙың төрҙәре. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙе ҡулланып, мәҡәләләр яҙыу.

Тура телмәр менән ситләтелгән телмәр. Текст синтаксисы-1 сәғәт

Дөйөм мәғлүмәт. Макротекст һәм микротекст. Тексттың коммуникатив, структур, грамматик бөтөнлөгө. Тексты редакторлау. Публицистик характерҙағы ижтимағи- сәйәси, әхлаҡ, этик, тарихи һәм әҙәби темаларға инша яҙыу.

## Тематик планлаштырыу

| № п/п | Бүлектәр һәм темалар бирелеше | Сәғәттәр һаны | Шул иҫәптән : | | | Үҙ аллы эштәр өсөн бүленгән сәғәттәр һаны |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | дәрестәр | Тест эштәре | Контроль эштәр | |
| 1. | Тел һәм телмәр | 2 | | | | |
| 2. | Лексика, фразеология | 2 | | | | |
| 3. | Фонетика, графика | 4 | | | | |
| 4. | Һүҙьяһалыш | 2 | | | 1 | 1 |
| 5. | Грамматика (исем, сифат, һан, алмаш) | 12 | | 1 | | |
| 6. | Ҡылым | 10 | | | | |
| 7. | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 4 | | 1 | 1 | |
| 1. | Рәүеш | 2 | | | | |
| 2. | Ярҙамсы һүҙҙәр | 6 | | | | |
| 3. | Синтаксис | 12 | | | | |
| 4. | Грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр | 2 | | | 1 | 1 |
| 5. | Ҡушма һөйләм | 4 | | 1 | | |
| 6. | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр | 2 | | | | |
| 7. | Тура һәм ситләтелгән телмәр | 2 | | | | 1 |
| 18. | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 2 | | 1 | 1 | |
| | Бөтәһе | 68 | | 4 | 4 | 4 |

**10-11-се кластарҙа “Башҡорт әҙәбите” фәнен урта дөйөм белем биреү кимәлендә өйрәнеү һөҙөмтәһендә сығарылыш уҡыусыһы база кимәлендә түбәндәге күнекмәләргә өйрәнә:**

- Телдән һәм яҙма мәғлүмәтте адекват ҡабул итеү, төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу, төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу, һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу, электрон ҡулланмаларҙан файҙаланыу, индивидуаль һәм коллектив эшмәкәрлек, орфоэпик, лексик, грамматик, стилистик нормаларҙы һаҡлау, доклад, рефераттар менән сығыш яһау;
- эшмәкәрлекте үҙ аллы ойоштороу оҫталығы, уны баһалау;
- төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары менән эшләй белеү күнекмәһенә эйә булыу.

Фән һөҙөмтәләре:

- башҡорт халыҡ ижадында һәм башҡа халыҡтарҙың фольклорында, башҡорт яҙыусыларының әҫәрһәрендә күтәрелгән төп проблемаларҙы аңлау;
- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлай белеү;
- әҙәби терминдар менән эш итә белеү;
- автор позицияһын аңлау, баһа биреү;
- өйрәнелгән әҫәрҙәр буйынса инша яҙыу, рефераттар әҙерләү.

1.Ҙур булмаған эпик әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен һөйләп биреү;
Художество әҫәрҙәрен инсценировкалау.
2.Уҡытыусы ҡуйған проблемалы һорау ярҙамында геройға характеристика биреү;
Тәҡдим ителгән әҫәрҙе тәржемә итә белеү,таныш булмаған һүҙҙәрҙе айыра белеү;
-12-14 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү.

-эпик,лирик,лиро-эпик һәм драматик әҫәрҙәрҙе айыра белеү.
3.Һорауҙарға тулы яуап һәм геройҙарға баһалама биреү;
-уҡылған әҫәрҙәргә үҙ мөнәсәбәтеңде белдерә белеү.

**Базис кимәлендә сығарылыш уҡыусыһы** ***түбәндәге күнекмәләргә өйрәнеү мөмкинлеген ала*:**

:

- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең авторын, исемен, мәғәнәһен;
- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең төп темаһын, композицион үҙенсәлектәрен;
- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең ваҡиғаһын (сюжетын) һәм геройҙарын (геройҙар һәм ваҡиғаларҙың үҙ-ара бәйләнешен);
- әҫәрҙең художестволы образы, темаһы, идеяһы, сюжеты, композицияһы, рифма хаҡындағы төшөнсәләрҙең билдәләре;
- драматик һәм лиро-эпик әҫәрҙәрҙең характерлы үҙенсәлектәре;
- программа тарафынан ятлау өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙең текстары.

Уҡыусылар түбәндәге күнекмәләргә эйә булырға тейеш:
1-се төр күнекмәләр

- яҙыусы һүрәтләгән художестволы картиналарҙы уй менән күҙ алдына баҫтырыу;
- художестволы әҫәрҙәрҙе, фәнни һәм публицистика әҫәрҙәрен айыра белеү;
- өйрәнелә торған әҫәрҙәрҙең сюжет элементтарының, композиция**ның** (автор ҡылыҡһырламаһы, геройҙарҙың эше, ҡылыҡтары һәм портретының, пейзаж һәм интерьерҙың) идея-художество урынын билдәләү;
- контекст эсендә һүрәтләү сараларының идея-художество урынын билдәләү;
- уҡытыусы ҡуйған проблемалы һорау ярҙамында геройға ҡылыҡһырлама биреү;
- авторҙың мөнәсәбәтен билдәләү маҡсатында геройҙарҙы үҙ-ара сағыштырыу;
- эпик, лирик, лиро-эпик һәм драматик әҫәрҙәрҙе айыра белеү.
- 2-се төр күнекмәләр
- художестволы, фәнни-популяр һәм публицистик текстарҙы дөрөҫ, етеҙ итеп ҡысҡырып уҡыу;
- художестволы әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу;
- эпик әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен яҙма рәүештә (телдән) тулы итеп йәки һайлап, ҡыҫҡартып һөйләп биреү (изложение төҙөү);
- өйрәнелгән әҫәр буйынса телдән йәки яҙма рәүештә фекерләү характерындағы инша яҙыу;
- һорауҙарға тулы яуап һәм геройҙарға (индивидуаль һәм сағыштырма) баһалама биреү;
- эпик әҫәргә йәки уның өҙөгөнә план төҙөү;
- телдән йәки яҙма сығыш яһау өсөн план төҙөү;
- үҙ аллы уҡылған әҙәби сәнғәт әҫәрҙәренә (әҫәрҙәге герой һәм ваҡиғаларға ҡарата үҙ мөнәсәбәтеңде белдереп) яҙма йәки телдән баһалама бирә белеү.

Мәктәптәр өсөн сығарылған фәнни-популяр китаптарҙың аңлатма аппаратынан, шулай уҡ мәктәп өсөн сығарылған әҙәбиәт ғилеме һүҙлегенән файҙалана белеү.

.

**10-11-се кластарҙа “Башҡорт әҙәбиәте” предметының төп йөкмәткеһе**

Программала ҡаралған курстың йөкмәткеһе фәнни һәм еңел аңлайышлылыҡ, системалылыҡ һәм күсәгилешлек нигеҙендә эшләнде. Әҙәбиәт материалы кластар буйынса милли мәктәптәрҙең уҡыу планына яраҡлаштырып бүленде. 10-сы класта Д.Юлтый, Ә.Зәки Вәлиди, М.Буранғол, Ғ.Хәйри, Һ.Дәүләтшина, Р.Ниғмәти, Б.Бикбай, З.Биишева, Н.Нәжми ижады өйрәнелә.

Уҡыу курсының эш программаһы түбәндәге исемлеккә А, В һәм С ҡараған әҫәрҙәрҙе өйрәнеүҙе үҙ эсенә ала.

**А исемлеге** башҡорт әҙәбиәтенең мәктәп кимәлендә традиция көсөнә эйә булған конкрет әҙәрҙәр теҙмәһен үҙ эсенә ала.

**В исемлеге** мәктәп курсы әҙәбиәтен өйрәнеүҙә электән тарихта булған авторҙар әҫәрҙәре һәм ижади биографиялары теҙмәһе. Был исемлектә өйрәнергә мөмкин булған әҫәпҙәр ҡаралған. Программа төҙөүсе әҫәрҙе үҙе һайлап ала.

**С исемлеге** үҙ эсенә билдәле принципҡа нигеҙләнеп айырылған ( теоретик йәки тарихи-әҙәби) темаһын һәм әҙәби күренештәр теҙмәһен ала. Алынған әҫәр нигеҙендә өйрәнелә торған әҙәби күренеш конкрет авторҙы программа төҙөүсе үҙе һайлай. Был исемлектә В исемлегенә ҡараған өҫтәмә әҫәрҙәр ҡабатланмай.

**А исемлеге**

Башҡорт совет әҙәбиәтенең формалашыуы - 1сәғәт

Яңы әҙәбиәттең барлыҡҡа килеүенең социаль-тарихи ерлеге. Башҡорт әҙәбиәтендәге ике йүнәлеш: милли-демократик әҙәбиәт һәм совет әҙәбиәте.

Ш.Бабич, Х.Ғәбитов ижадтарында милли-патриотик тема.

Октябрьреволюцияһы һәм граждандар һуғышы осоронда башҡорт совет поэзияһының тыуыуы.

20-се йылдар башында башҡорт әҙәбиәте. Поэзияның һәм прозаның үҫеше. А.Таһировтың, Ғ.Дәүләтшиндың, Ғ.Хәйриҙең повестарында яңы йәмғиәт төҙөүсе йәштәр, комсомолдар, большевиктар.

Башҡорт совет драматургияһының тыуыуы: Д.Юлтый, М.Ғафури, А.Таһиров пьесалары.

Дауыт Юлтый -3 сәғәт

Яҙыусының тормош юлы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге .Тәүге әҫәрҙәре. Беренсе донъя һуғышы осоронд сағылдырған шиғырҙары. (“Сумка”, “Шинель”, “Ҡан баҙары).

Халыҡсан, реалистик поэзия өсөн көрәше.

Шағирҙың поэмалары. (“Мәйсәрә”, Нефть тураһында әкиәт”, “Айһылыу”).

Д.Юлтый – драматург. “Ҡараҫол” драмаһы. Драмала сағылдырылған тарихи осор. Әҫәрҙең драматик эшләнеше.

“Ҡан” романының проблематикаһы – һалдаттарҙа синфи аңдың, империалистик һуғышҡа ҡаршы протест тойғоларының үҫешен һүрәтләү.

Романдың сюжет-композицион үҙенсәлектәре, теле

. Ә.Вәлиди Туған-2 сәғәт

Тормошо. Мәҙрәсәлә уҡыу йылдары . Дәүләт эшмәкәлеге. Башҡорт хөкүмәте етәкселәренең күренеклеһе.

Эмиграцияға китеүе. Ундағы эшмәкәрлеге. Ғалимлығы.

Төрки халыҡтары тарихы буйынса китаптары. Донъя ғалимдары араһындағы абруйы.

Әхмәтзәки Вәлиди – мемуарист.

“Хәтирәләр” мемуар китабы. Хәтирәләрендә башҡорт халыҡ ижады, этнографияһы, күренекле шәхестәр, яҙыусылар тормошо һәм ижады хаҡында күҙәтеүҙәре, фекерҙәре, “Хәтирәләр”ҙең жанр үҙенсәлеге. Хикәйәләү стиле. Китаптың тарихыбыҙҙа, мәҙәниәтебеҙҙә тотҡан урыны.

Мөхәмәтша Буранғол-2 сәғәт

Әҙиптең тормош юлы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге.

М.Буранғол – сәсән. Тыуған ил, Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы ҡобайырҙары.
М.Буранғол – фольклор белгесе.
М.Буранғол – драматург.
Драматургтың фольклор-этнографик характерҙағы пьесалары: “Ашҡаҙар”, “Буранбай”, “Шәүрәкәй”, “Зәңгәр шәл” һ.б.
“ Башҡорт туйы” драмаһы. Пьесала башҡорт туйының һүрәтләнеше. Буранбай һәм Гөлғәйшә образдары.
Пьесан жанр һәм драматургик үҙенсәлектәре.

**В исемлеге**

Ғәйнан Хәйри - 2 сәғәт
Тормош юлы һәм мәҙәниәт. Мәғариф өлкәһендәге эшмәкәрлеге.
Тәүге ижад осоро. Ғ.Хәйри – шағир. “Беҙҙең яҙ” шиғырҙар йыйынтығы.
Ғ.Хәйри – прозаик. “Кооператорҙар” повесы.
“Боролош” романы. Әҫәрҙең яҙылыу һәм сығарылыу тарихы. Тәүге роман булараҡ әһәмиәте.
Романда күтәрелгән проблемалар. Башҡорт халҡының революцияға килеү юлдары. Ғариф бай образы. Революцион рухлы йәштәр: Шәмси, Баһау һ.б.
Романдың жанр тәбиғәте, хикәйәләү стиле, художество сифаты.

Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте– 1 сәғәт
Башҡорт поэзияһының был осорҙа күберәк маҡтауға ҡоролған одалар рәүешенә әйләнә барыуы. Партияны, юлбашсыларҙы данлау.
Поэма жанрының үҫеүе. (Ғ.Сәләм, Б.Ьикбай, Р.Нигмәти).
Һуғыш һәм революция темаһына арналған повесть һәм романдар. (А.Таһиров , А.Карнай повестары).
Драматургияла яңы әҫәрҙәр. Яҙыусыларҙы репрессиялау.

Һәҙиә Дәүләтшина -2 сәғәт
Яҙыусының тормош һәм ижад юлы. Уҡыу йылдары. Ире яҙыусы Ғөбәй Дәүләтшин менән бергә репрессияға тарттырылыуы. 15 йылдан һуң ирекkә сығарылыуы. Илгә, ижадҡа тоғролоҡтоң үрнәге. Башланғыс ижадында хикәйәләр. Шиғырҙары.
“Ырғыҙ” романы. Романда башҡорт халҡының тормош-көнкүрешенең йәнле сағылышы. Айбулат, Гөлйөҙөм образдарында халҡыбыҙҙың күркәм холҡо, ғөрөфөғәҙәттәре кәүҙәләнеше. Ныязғол, Рәхимә, Ғәлимә, Имай образдары – замандың төрлө типтары.
Романдың эпик киңлеге, тарихилыҡ принцибы. Әҫәрҙең ҡатмарлы композицияһы. Төрлө телдәргә тәржемә ителеүе.
Һ.Дәүләтшинаның тормош һәм ижад ҡаһарманлығы.

Әхиәр Хәкимов -3 сәғәт
Әҙиптең тормош юлы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге.
Ә.Хәкимдең әҙәбиәткә тәнҡитсе һәм әҙәбиәт белгесе буларыҡ килеүе.
“Әҙәбиәт һәм заман” мәҡәләләр йыйынтығы. Әҙәби тәржемә эштәре.
Тәүге хикәйәләре. Үҙен повесть жанрында танытыуы.
Ә.Хәким – романист. “Һауыр ҡумта”, “Думбыра сыңы” романдары.
Өйөрмә” романы. 1937-1938 йылдарҙағы репрессиялар. Символик мәғәнәле өйөрмә образы.

Романдың хәҙерге замандағы үҙгәрештәрҙе, сәйәси. Фәлсәфәүи ҡараштарҙың яңырыуын жудожестволы һүрәтләүе менән яңылығы һәм әһәмиәте.

Рәшит Солтангәрәев - 1 сәғәт

Яҙыусының биографияһы һәм ижады. Хикәйә өлкәһендәге эшмәкәрлеге.

"Ханбал" хикәйәһе. Халыҡтың Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы ауыр тормошон кәүҙәләндереү. Яуыз холоҡло Ханбал образы.

"Ҡиәмәтлек кейәү" хикәйәһе. Хикәйәләге психологизм. Әҫәрҙең халыҡсан тел-стиль матурлығы.

Динис Бүләков -2 сәғәт

Яҙыусының биографияһы. Тәүге хикәйәләр йыйынтығы. Мораль-этик проблемалар.

"Килмешәк" романында хәҙерге ауыл тормошондағы ижтимағи, иҡтисади, мораль-этик мәсьәләләрҙең һүрәтләнеше.Әҫәрҙә халыҡ байлығы – тәбиғәтте һаҡлау өсөн көрәш темаһы. Төп образдар: Нуриханов, Яубаҫаров. Әҫәрҙең теле, художество эшләнеше.

"Ғүмер бер генә" романы. Романда заман темаһы., үҙгәртеп ҡороу реформалары осорона хас һыҙаттарҙы һүрәтләү.

Профессор Арынбаҫаров, унының шәкерттәре Насыров, Сәмиғуллина, Йәғәфәров образдарында демократия өсөн көрәш идеяһын сағылдырыу. Романда яҡшылыҡ, изгелек, игелектең еңеүенә ышаныс идеяһын раҫлау.

Романдың жудожество үҙенсәлектәре, детектив элементтар, теленең байлығы, халыҡсанлығы.

**С исемлеге**

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда әҙәбиәт - 1 сәғәт

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында әҙәбиәт алдында торған бурыстар. Был йылдарҙағы башҡорт әҙәбиәтенең үҙенсәлеге. Әҫәрҙәрҙә мобилизицион рух, оперативлыҡ. Бәләкәй күләмле әҫәрҙәрҙең әүҙемләшеүе. Лирик поэзияның төп мотивтары: Тыуған илде һөйөү, дошманға нәфрәт. Х.Кәрим, С.Ҡудаш лирикаһы. Халыҡтың рухи көсөн кәүҙәләндергән поэма һәм балладалар. (Р.Ниғмәти "Һинең кәләшенд хаттары", М.Кәрим "Үлмәҫбай"). Дошман тылындағы поэзиябыҙ.

Рәшит Ниғмәти- 2 сәғәт

Яҙыусының биографияһы һәм ижады. "Даалаларҙа", "Украина" шиғырҙар циклы. "Һөйөү" шиғыры.

30-сы йылдарҙағы поэзияһында Тыуған ил һәм халыҡ образдары. ("Йәмле Ағиҙел буйҙары").

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ижады. Публицистик лирикаһының үҫеше: "Тыуған илем өсөн!", "Әсә һүҙе", "Баҫыуға, туғандар!", "Үс ал, патриот!" шиғырҙары. "Герой тураһында поэма" әҫәрендә һүрәтләнгән Вася образы.

"Үлтер, улым фашисты!" поэмаһында тыуған ил һәм халыҡ образы кәүҙәләнеше.

"Һинең кәләшеңдең хаттары" поэмаһында мөхәббәт темаһы. Ҡыҙ һәм егет образдары. Фронт һәм тыл берҙәмлеге.

Һуғыштан һуңғы йылдар ижады. Тыныслыҡ өсөн көрәш, хеҙмәт темалары: "Беҙ тыныслыҡ яҡлы". "Хеҙмәт", "Ике рәхмәт".

“Һаҡмар ҡыҙы” поэмаһында юғары уңыш өсөн көрәште һүрәтләү. Гөлгөл образы.

Балалар әҙәбиәте, драматургия, тәржемә өлкәһендәге эшмәкәрлеге. Р.Ниғмәти – Башҡортостандың халыҡ шағиры.

Баязит Бикбай -3сәғәт

Яҙыусының биографияһы һәм ижад юлы. 30-сы йылдарҙағы поэзияһы. “Ер” поэмаһы. Поэманың идея-художество үҙенсәлектәре.

Бикбай поэзияһында азатлыҡ темаһы.

“Ҡарлуғас” драмаһы. Драмала башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн көрәшен кәүҙәләндереү. Драманың төп геройы булған халыҡ образын ҡылыҡһырлау. Кире образдар. Драманың теле.

“Салауат” драмаһы.

Яҙыусының һуғыштан һуң проза өлкәһендәге эшмәкәрлеге.

“Аҡсәскә” повесы. Әҫәрҙең төп образдары.

Б.Бикбай ижадының башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урыны.

Һуғыштан һуңғы осор әҙәбиәт – 1 сәғәт

Поэзияла Бөйөк Ватан һуғышы, тыныслыҡ өсөн көрәш темалары.

Был йылдарҙа яҙылған роман, повесть, хикәйәләргә күҙәтеү. Драматургияға яңы көстәрҙең килеүе, яңы пьесалар.

Назар Нәжми – 2 сәғәт

Назар Нәжмиҙең биографияһы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ижады. (“Окопта уйҙар”, “Иҫән ҡалһам”.)

Һуғыштан һуңғы йылдарҙағы ижады. Патриотик поэзияһының үҙенсәлектәре.

“Йыр тураһында баллада” (М.Кәримкә арналған). Шағир-һалдат образы.

“Урал” поэмаһы. Уның патриотик рухы. Ҡурайсы образы. Поэманың патриотик үҙенсәлектәре.

“Шағир һәм шаһ”. Ижад азатлығы мәсьәләһе. Талант һәм власть проблемаһы. Поэманың художество көсө.

Назар Нәжмиҙең драма әҫәрҙәре.

Хәҙерге әҙәбиәт (поэзия, проза) - 7 сәғәт

Хәҙерге әҙәбиәт төшөнсәһенең хронологик сиктәре. XX быуаттың һуңғы сирегендә йәмғиәт тормошондағы үҙгәрештәр. Реформалар осоро. Быны хәҙерге әҙәбиәткә йоғонтоһо.

70-90-сы йылдарҙағы башҡорт әҙәбиәтенең төп үҫеш тенденциялары. Илдә демократик үҙгәрештәр менән 90-сы йылдарҙан хәҙерге әҙәбиәт үҫешенең өр-яңы осоро башланыуы. Идея-тематик яңырыштар. Етди ижади эҙләнеүҙәр.

Хәҙерге поэзияның үҫеш йүнәлештәре. Гражданлыҡ поэзияһы. (М.Кәрим, Р.Бикбаев, Р.Сафин, Х.Назар шиғырҙары).

Фәлсәфәүи лириканың көсәйеүе. (Н.Нәжми, Муса Ғәли шиғырҙары).

Хәҙерге башҡорт поэмалары. (Ғ.Рамазанов, Ш.Бикҡол, Р.Бикбаев, А.Игебаев поэмалары).

Хәҙерге прозала заман темаһы (Д.Бүләков, Р.Солтангәрәев, Ә.Хәкимов, Т.Ғарипова романдары).

Урта быуын яҙыусыларының әҫәрҙәре. (Ф.Иҫәнғолов, Я.Хамматов.Ш.Янбаев, Р.Низамов, Н.Мусин романдары, повестары һәм хикәйәләре).

Прозала эпопея, ҙур эпик формалар .

Тарихи романдар.

.

Азат Абдуллин - 1 сәғәт

Яҙыусының тормош һәм ижад юлы.

Тәүге осор ижады. “Онотма мине, ҡояш!” пьесаһы.

“Ун өсөнсө председатель” драмаһы – драматургтың иң уңышлы әҫәрҙәренең береһе. Колхоз председателе Сәғәҙиев образы. Коллектив образы.

Пьесаның драматургик яҡтан үткер ҡоролошо, диалог һәм монологтарҙың характерҙы асыуҙағы роле.

Азат Абдуллин драмаларының башҡорт һәм Рәсәй драма театрҙарында тотҡан урыны.

Хәсән Назар- 2 сәғәт

Х.Назарҙың биографияһы. Уҡыу йылдары, журналистик эшмәкәрлеге, ижады. Беренсе шиғырҙар йыйынтыҡтары.

“Заман заңы”, “Асманға ашыу” китаптарында фәлсәфәүи һәм гражданлыҡ лирикаһы.

“Шәмсыраҡ” поэмаһы.Әҫәрҙең композицион үҙенсәлеге. Поэманың лирик геройы.

## Тематик планлаштырыу

| № п/п | Бүлектәр һәм темалар бирелеше | Сәғәттәр һаны | Шул иҫәптән : | | | Үҙ аллы эштәр өсөн бүленгән сәғәттәр һаны |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | дәрестәр | Тест эштәре | Контроль эштәр | |
| 1. | Башҡорт совет әҙәбиәтенең формалашыуы | 1 | | | | |
| 2. | Д.Юлтый | 1 | | | | |
| 3. | Ә.Вәлиди Туған | 1 | | | | |
| 4. | М.Буранғол | 1 | | | | |
| 5. | Ғ.Хәйри | 1 | | | 1 | 1 |
| 6. | Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте | 1 | | 1 | | |
| 7. | Һ.Дәүләтшина | 1 | | 1 | 1 | |
| 8. | Бөйөк Ватан һуғышы йылдары әҙәбиәте | 1 | | 2 | 2 | 2 |
| 9. | Р.Ниғмәти | 1 | | | | 1 |
| 10. | Б.Бикбай | 1 | | | | |
| 11. | З.Биишева | 1 | | | | |
| 12. | Һ уғыштан һуңғы осор әҙәбиәт | 1 | | | | |
| 13 | Назар Нәжми | 2 | | | | |
| 14. | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 3 | | 1 | 1 | |
| 1. | Хәҙерге әҙәбиәт(поэзия, проза) | 4 | | | | |
| 2. | Мостай Кәрим | 3 | | | | |
| 3. | Рәми Ға рипов | 1 | | | | |
| 4. | Әхиәр Хәкимов | 1 | | | | |
| 5. | Ғайса Хөсәйенов | 1 | | | 1 | 1 |
| 6. | Рауил Бикбаев | 2 | | 1 | | |
| 7. | Ноғман Мусин | 2 | | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8. | Азат Абдуллин | 1 | | | | 1 |
| 9. | Рәшит Солтангәрәев | 1 | | | | |
| 10. | Динис Бүләков | 2 | | | | |
| 11. | Хәсән Назар | 2 | | | | |
| 12. | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 3 | | 1 | 1 | |
| | Бөтәһе | 34 | | 4 | 4 | 4 |

**Календарь-тематик план, 10-сы класс башҡорт теле**

| № | Расписание буйынса | Үткәрелгән көн | Тема | Дәрес һаны | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| **1.** | 06.09 | | Тел һәм телмәр. Тел һәм уның вазифаһы. | 1 | |
| **2.** | 07.09 | | Башҡорт теленең функциональ үҫеше. | 1 | |
| **3.** | 13.09 | | Донъя телдәре. Күп төрлөлөгө. | 1 | |
| **4.** | 14.09 | | Башҡорт теле ҡәрҙәш телдәр араһында. | 1 | |
| **5.** | 20.09 | | **Инеш административ контроль диктант “Аҡмулла”.** | **1** | |
| **6.** | 21.09 | | Үле һәм тере телдәр. Тәбиғи һәм яһалма телдәр. | 1 | |
| **7.** | 27.09 | | Тел төҙөлөшө һәм тел тураһында фән бүлектәре. | 1 | |
| **8.** | 28.09 | | Телмәр мәҙәниәте. | 1 | |
| **9.** | 04.10 | | Дөрөҫ әйтелеш нормалары. Һүҙ эсендәге баҫым. | 1 | |
| **10.** | 05.10 | | Лексика. Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге.. | 1 | |
| **11.** | 12.10 | | Омонимдар. Омофондар | 1 | |
| **12.** | 18.10 | | Синонимдар. | 1 | |
| **13.** | 19.10 | | Антонимдар. | 1 | |
| **14.** | 25.10 | | Изложение. | 1 | |
| **15.** | 26.10 | | Төп башҡорт һүҙҙәре. Үҙләштерелгән һүҙҙәр. | **1** | |
| **16.** | 08.11 | | Калькалар. | 1 | |
| **17.** | 09.11 | | Неологизмдар. Профессионализмдар. | **1** | |
| **18.** | 15.11 | | Диалект һүҙҙәре. | 1 | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **19.** | 16.11 | | **Лексика темаһы буйынса контроль диктант “Ер майының тарихы”.** | 1 | |
| **20.** | 22.11 | | Терминдар. Һүҙлектәр. | 1 | |
| **21.** | 23.11 | | Эмоциональ-экспрессив һүҙҙәр. | 1 | |
| **22.** | 29.11 | | Фонетика. Орфоэпия. Интонация. Телмәр такты. | 1 | |
| **23.** | 30.11 | | Ижектәр. | 1 | |
| **24.** | 06.12 | | Баҫым. | 1 | |
| **25.** | 07.12 | | Һуҙынҡы өндәр. | 1 | |
| **26.** | 13.12 | | Редукция. Протеза. Эпентеза. Элизия. | 1 | |
| **27.** | 14.12 | | Тартынҡы өндәр. | 1 | |
| **28.** | 20.12 | | Орфоэпия. Орфография. | 1 | |
| **29.** | 21.12 | | Графика. | 1 | |
| **30.** | 27.12 | | Телдә һүҙьяһалыш ысулдары. | 1 | |
| **31.** | 28.12 | | Һүҙьяһалыш һәм стилистика. | 1 | |
| **32.** | 10.01 | | Телмәр үҫтереү. Изложение | 1 | |
| **33.** | 11.01 | | Башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре. | 1 | |
| **34.** | 17.01 | | Исем. | 1 | |
| **35.** | 18.01 | | Иседең эйәлек һәм хәбәрлек категориялары. | 1 | |
| **36.** | 24.01 | | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе. | 1 | |
| **37.** | 25.01 | | Килеш формаларын стилистик файҙаланыу мөмкинлектәре. | 1 | |
| **38.** | 31.01 | | Сифат. | 1 | |
| **39.** | 01.02 | | Һан. | 1 | |
| **40.** | 07.02 | | Алмаш. | 1 | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **41.** | 08.02 | | Алмаштарҙың стилистик мөмкинлектәре. | 1 | |
| **42.** | 14.02 | | Ҡылым. | 1 | |
| **43.** | 15.02 | | Ҡылымдарҙың лексик-семантик төркөмдәре. | 1 | |
| **44.** | 21.02 | | Күсемле, күсемһеҙ ҡылымдар. | 1 | |
| **45.** | 22.02 | | Ҡылымдарҙың грамматик категориялары. Һөйкәлеш | 1 | |
| **46.** | 28.02 | | Үткән заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының стилистик мөмкинлектәре. | 1 | |
| **47.** | 29.02 | | Хәҙерге һәм киләсәк заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының стилистик мөмкинлектәре. | 1 | |
| **48.** | 06.03 | | Бойороҡ һөйкәлеше. | 1 | |
| **49.** | 07.03 | | Шарт һөйкәлеше. | 1 | |
| **50.** | 13.03 | | Теләк һөйкәлеше. | 1 | |
| **51.** | 14.03<br>20.03 | | Йүнәлеш категорияһы. | 2 | |
| **52.** | 21.03<br>03.04 | | Ҡылым төркөмсәләре. Сифат ҡылым. | 2 | |
| **53.** | 04.04<br>11.04 | | Хәл ҡылым. | 2 | |
| **54.** | 17.04<br>18.04 | | Исем ҡылым. | 2 | |
| **55.** | 24.04<br>25.04 | | Уртаҡ ҡылым. | 2 | |
| **56.** | 02.05<br>08.05 | | Ҡылым күләмдәре. | 2 | |
| **57.** | 15.05 | | Ҡылым рәүешлеге (модаллеге) | 2 | |
| **58.** | 16.05<br>22.05 | | Һүҙ төркөмдәре темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 2 | |
| **59.** | 23.05 | | **Контроль диктант “Сихри моң”.** | 1 | |

**Календарь-тематик план, 10-сы класс башҡорт әҙәбиәте**

| № | Расписание буйынса | Үткәрелгән көн | Тема | Дәрес һаны | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| **1.** | 06.09 | | Тел һәм телмәр. Тел һәм уның вазифаһы. | 1 | |
| **2.** | 07.09 | | Башҡорт теленең функциональ үҫеше. | 1 | |
| **3.** | 13.09 | | Донъя телдәре. Күп төрлөлөгө. | 1 | |
| **4.** | 14.09 | | Башҡорт теле ҡәрҙәш телдәр араһында. | 1 | |
| **5.** | 20.09 | | **Инеш административ контроль диктант “Аҡмулла”.** | **1** | |
| **6.** | 21.09 | | Үле һәм тере телдәр. Тәбиғи һәм яһалма телдәр. | 1 | |
| **7.** | 27.09 | | Тел төҙөлөшө һәм тел тураһында фән бүлектәре. | 1 | |
| **8.** | 28.09 | | Телмәр мәҙәниәте. | 1 | |
| **9.** | 04.10 | | Дөрөҫ әйтелеш нормалары. Һүҙ эсендәге баҫым. | 1 | |
| **10.** | 05.10 | | Лексика. Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге.. | 1 | |
| **11.** | 12.10 | | Омонимдар. Омофондар | 1 | |
| **12.** | 18.10 | | Синонимдар. | 1 | |
| **13.** | 19.10 | | Антонимдар. | 1 | |
| **14.** | 25.10 | | Изложение. | 1 | |
| **15.** | 26.10 | | Төп башҡорт һүҙҙәре. Үҙләштерелгән һүҙҙәр. | **1** | |
| **16.** | 08.11 | | Калькалар. | 1 | |
| **17.** | 09.11 | | Неологизмдар. Профессионализмдар. | **1** | |
| **18.** | 15.11 | | Диалект һүҙҙәре. | 1 | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **19.** | 16.11 | | **Лексика темаһы буйынса контроль диктант “Ер майының тарихы”.** | 1 | |
| **20.** | 22.11 | | Терминдар. Һүҙлектәр. | 1 | |
| **21.** | 23.11 | | Эмоциональ-экспрессив һүҙҙәр. | 1 | |
| **22.** | 29.11 | | Фонетика. Орфоэпия. Интонация. Телмәр такты. | 1 | |
| **23.** | 30.11 | | Ижектәр. | 1 | |
| **24.** | 06.12 | | Баҫым. | 1 | |
| **25.** | 07.12 | | Һуҙынҡы өндәр. | 1 | |
| **26.** | 13.12 | | Редукция. Протеза. Эпентеза. Элизия. | 1 | |
| **27.** | 14.12 | | Тартынҡы өндәр. | 1 | |
| **28.** | 20.12 | | Орфоэпия. Орфография. | 1 | |
| **29.** | 21.12 | | Графика. | 1 | |
| **30.** | 27.12 | | Телдә һүҙьяһалыш ысулдары. | 1 | |
| **31.** | 28.12 | | Һүҙьяһалыш һәм стилистика. | 1 | |
| **32.** | 10.01 | | Телмәр үҫтереү. Изложение | 1 | |
| **33.** | 11.01 | | Башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре. | 1 | |
| **34.** | 17.01 | | Исем. | 1 | |
| **35.** | 18.01 | | Иседең эйәлек һәм хәбәрлек категориялары. | 1 | |
| **36.** | 24.01 | | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе. | 1 | |
| **37.** | 25.01 | | Килеш формаларын стилистик файҙаланыу мөмкинлектәре. | 1 | |
| **38.** | 31.01 | | Сифат. | 1 | |
| **39.** | 01.02 | | Һан. | 1 | |
| **40.** | 07.02 | | Алмаш. | 1 | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **41.** | 08.02 | | Алмаштарҙың стилистик мөмкинлектәре. | 1 | |
| **42.** | 14.02 | | Ҡылым. | 1 | |
| **43.** | 15.02 | | Ҡылымдарҙың лексик-семантик төркөмдәре. | 1 | |
| **44.** | 21.02 | | Күсемле, күсемһеҙ ҡылымдар. | 1 | |
| **45.** | 22.02 | | Ҡылымдарҙың грамматик категориялары. Һөйкәлеш | 1 | |
| **46.** | 28.02 | | Үткән заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының стилистик мөмкинлектәре. | 1 | |
| **47.** | 29.02 | | Хәҙерге һәм киләсәк заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының стилистик мөмкинлектәре. | 1 | |
| **48.** | 06.03 | | Бойороҡ һөйкәлеше. | 1 | |
| **49.** | 07.03 | | Шарт һөйкәлеше. | 1 | |
| **50.** | 13.03 | | Теләк һөйкәлеше. | 1 | |
| **51.** | 14.03<br>20.03 | | Йүнәлеш категорияһы. | 2 | |
| **52.** | 21.03<br>03.04 | | Ҡылым төркөмсәләре. Сифат ҡылым. | 2 | |
| **53.** | 04.04<br>11.04 | | Хәл ҡылым. | 2 | |
| **54.** | 17.04<br>18.04 | | Исем ҡылым. | 2 | |
| **55.** | 24.04<br>25.04 | | Уртаҡ ҡылым. | 2 | |
| **56.** | 02.05<br>08.05 | | Ҡылым күләмдәре. | 2 | |
| **57.** | 15.05 | | Ҡылым рәүешлеге (модаллеге) | 2 | |
| **58.** | 16.05<br>22.05 | | Һүҙ төркөмдәре темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 2 | |
| **59.** | 23.05 | | **Контроль диктант “Сихри моң”.** | 1 | |